*Зөһрә КАМАЛОВА*

# ТЫРЫШЛЫҠ
## *үрҙәргә илтә*

Хеҙмәт һөйһәң, ил һөйәр, ти халыҡ. Мирхәт был һүҙҙәрҙең асылын бәләкәйҙән аңлап үҫте. Әле 9-сы синыфта уҡығанда уҡ йәй һайын үҙҙәренең "Күгәрсен" совхозында электрик ярҙамсыһы булып эшләй. Үҙенең кәңәшсе-тәрбиәселәре Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Родион Никифорович Горшков менән Александр Григорьевич Власовҡа (хәҙер мәрхүм инде) сикһеҙ рәхмәтле. Техникаға һөйөүҙе лә улар уята, һуңынан уларҙың кәңәш-ҡоро тормошта бик ҡулай була. Иң мөһиме, тырышлыҡҡа, ныҡышмал булырға өйрәтә ветерандар.

Мораҡтағы 1-се мәктәпте тик "бишле" билдәләренә тамамлаған Мирхәткә Башҡортостан ауыл хужалығы институтының иң ҡатмарлыларҙан һаналған механизация бүлегенә уҡырға инеү һис ҡыйын булмай. Тырыш егет һынатмай: йыл һайын каникул мәлдәрендә колхозда йәки совхозда комбайнсы булып эшләй. Шулай, өсөнсө курстан һуң Мәләүез районының Трясин исемендәге колхозында иптәштәре менән иген һуғып алыу буйынса рекорд ҡуя. Хеҙмәттәренә юғары баһа бирелә: республика студент отрядтарының эш һөҙөмтәләре буйынса Мирхәт Чехословакияға путевка менән бүләкләнә.

*Мирхәт Закир улы ғаиләһе менән*



Институтты уңышлы тамамлаған егетте тыуған яғы — Күгәрсен районында ҡолас йәйеп ҡаршы алалар һәм инженер вазифаһына тәғәйенләйҙәр.

— Шуныһы ныҡ иҫтә ҡалған, — тип йылмайып хәтерләй Мирхәт Закир улы. — Яңы уҡыуын тамамлаған һәр йәш кеше кеүек, бер аҙ ял итергә ниәтләп ҡайтҡайным. Әммә ике көн дә үтмәне, совхозда баш

бухгалтер булып эшләгән атайым, иртәнге сәғәт алтыла уҡ уятып, эшкә алып та китте.

Шулай башлана хеҙмәт юлы Мирхәт Закир улының. Артабан ”Күгәрсен” совхозында баш инженер, район партия комитетында инструктор булып эшләй. Ситтән тороп уҡып, ауыл хужалығы институтының иҡтисад бүлеген тамамлай.

— Миңә ауыл хужалығында эшләү оҡшай ине, — ти Мирхәт Закир улы. — Шуға ла был эштең бар яғын да белергә, асылына төшөнөргә тырыштым. Йыш ҡына ауыл хужалығы белгестәренең квалификацияһын күтәреү курстарына бара инем. Был йәһәттән ул саҡта Күгәрсен районы партия комитетының 1-се секретары булып эшләгән Исмәғил Әхмәҙулла улы Ғәбитов йәштәргә бик ярҙам итә торғайны. Йәштәрҙе яуаплы вазифаларға тәғәйенләүҙән ҡурҡмай ине. Мин дә уға рәхмәтлемен.

90-сы йылдар илебеҙ тарихында ҡырҡа үҙгәрештәр заманы булараҡ иҫтә ҡалды. Тап ошо мәлдә Мирхәт Закир улына Мораҡтағы 90-сы профессиональ училищеға (хәҙер лицей) директор булып барырға тәҡдим итәләр. Ҙур ҡыйынлыҡтар кисергән уҡыу йортон өлгөлө профессиональ лицей итеү өсөн күп көс һала Мирхәт Закир улы. Йыл һайын 18 вагон күмер яғып йылытылған уҡыу йортона, уның дөйөм ятағына газ үткәртә, бының өсөн йылылыҡ трассаларын яңыртырға тура килә. Ике бинаның да ҡыйыҡтарын ҡалай менән яптыра. Ҡыҫҡаһы, тырышлыҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирә: уҡыу йортоноң матди хәле менән бергә уҡыу сифаты ла күтәрелә.

Тырышлығын күрәләр, баһалайҙар һәм 2000 йылда Мирхәт Закир улын Күгәрсен районы хакимиәте башлығының иҡтисад буйынса урынбаҫары итеп эшкә саҡыралар. Күп тә үтмәй, хакимиәт башлығы итеп тәғәйенләйҙәр. Мирхәт Закир улы район менән өс йыл етәкселек итә. Ошо осорҙа бында 180 километр газ үткәргестәр һалына, төҙөлөш эштәре күләме буйынса район баш ҡалабыҙ Өфөнән ҡала икенсе урынды биләй. Бик күп урындарҙа юлдар төҙөкләндерелә, яңылары һалына.

— Әйткәндәй, ошо ваҡыт арауығында районда һигеҙ күпер сафҡа инде, — ти Мирхәт Закир улы. — Шуның өсөһө Мораҡта. Бынан тыш, район мәҙәниәт һарайы төҙөлдө, Йомағужала мәҙәниәт һарайына бик яҡшы реконструкция үткәрелде. Район үҙәгендә 36 фатирлы яңы йорт файҙаланыуға тапшырылды. Күп кешегә ссуда бирелеп, шәхси йорттар төҙөү ҙә йылдам үҫеш алды.

Тырышлыҡ уңыш килтерә. Ә бөтә был һыҙаттарҙың нигеҙе нимәлә?

— Беҙгә эш һөйөүсәнлек, ныҡышмалыҡ атай-әсәйҙән күскән, — ти Мирхәт Закир улы. — Хәҙер мин теге ваҡыт атайымдың иртәнге сәғәт алтынан уятып эшкә алып китеүенә һис тә ғәжәпләнмәйем. Киреһенсә, рәхмәт әйтеп бөтә алмайым. Атайым Закир Ғайса улы ғүмере буйы ”Күгәрсен” совхозында эшләне, кассирҙан баш бухгалтер вазифаһына үрләне. Тырыш хеҙмәте өсөн бик күп маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән, Рәсәй Федерацияһы Ауыл хужалығы министрлығының Почет грамотаһына, байтаҡ миҙалдарға лайыҡ кеше. ”Хеҙмәт ветераны” тигән абруйлы исемде йөрөтә.

Әсәйем — Миңлегөлсөм Фәйзулла ҡыҙы ла бик уңған кеше. Оҙаҡ йылдар балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләне, һуңынан Мо-

раҡтағы 90-сы профессиональ лицейҙа китапханасы вазифаһын үтәне. Ул да хеҙмәт ветераны. Гөлнара һеңлем менән икебеҙҙе лә тырышып уҡырға, эштән ҡурҡмаҫҡа өйрәттеләр. Әле һеңлем башланғыс синыфтар уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы. Ғөмүмән, беҙҙең ғаиләгә һәр эште сифатлы, юғары кимәлдә башҡарыу хас. Әйтәйек, мәктәпте беҙ үҙебеҙ ҙә, балалар ҙа тик ”бишле”гә генә тамамланыҡ, институтты ла ”ҡыҙыл” диплом менән бөттөк. Быуындан-быуынға күсә килә ошо традиция, шуға ихлас ҡыуанам.

Эйе, эшләгәс, еренә еткереп, үҙең дә, кешеләр ҙә ҡыуанырлыҡ итеп эшләргә кәрәк. Шул саҡта атай-әсәйең, балаларың, ейәндәрең алдында ла йөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәй. Мирхәт Закир улы менән Рәйхана Шамил ҡыҙы Ҡазарғоловтар ошоно һәр саҡ иҫтә тота. Студент йылдарында барлыҡҡа килгән ғаиләләр ныҡ була, тиҙәр. Уларҙың ғаиләһе быға миҫал. Икенсе курста уҡ өйләнешә Мирхәт менән Рәйхана. Улдары Рәйес Өфөлә, ятаҡта йәшәгәндә тыуа. Хәҙер инде БДУ-ның физика факультетын тик ”бишле”гә генә тамамлаған Рәйес инженер булып эшләй. Бәләкәй сағында үҙен үҫтерергә ярҙам иткән апай-ағаларына, Ҡәмәриә әбеһенә, олатай-өләсәйҙәренә сикһеҙ рәхмәтле.

Ҡыҙҙары Гөлфиә лә ата-әсәһен ҡыуандырып тора, әле ул Өфө дәүләт нефть техник университетының иҡтисад бүлегендә уҡый. Кинйәләре — Әлфиә уҙған йыл беренсе синыфҡа барҙы.

— Ғүмер буйы яуаплы вазифаларҙа эшләгәс, күпселек ғаилә мәшәҡәттәре ҡатыным Рәйхана иңенә төшә, — ти Мирхәт Закир улы. — Әммә ул бөтәһенә лә өлгөрә. Мин дә ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә тырышам. Өфөлә йәшәһәк тә, ауылда йәшелсә-емеш үҫтерәбеҙ. Баҡса эшен бөтәбеҙ ҙә яратабыҙ.

Эйе, бына өсөнсө йыл инде Мирхәт Закир улы Өфөлә — республикабыҙҙың Мәғариф министрлығында министр урынбаҫары вазифаһын атҡара һәм профессиональ училищелар, лицейҙар эшен күҙаллай. Белеүебеҙсә, быйыл Рәсәй Мәғариф министрлығы профтехучилищелар һанын байтаҡҡа кәметте. Әлбиттә, был күп үҫмерҙәр өсөн урта махсус уҡыу йорто ишектәре ябылды тигән һүҙ. Был Башҡортостан Республикаһының мәғариф өлкәһенә лә ҡағылмай ҡалманы. Әгәр элек беҙҙә 107 урта махсус уҡыу йорто — лицей, училище, техникум иҫәпләнһә, хәҙер улар 104-кә ҡалды (3 кенә училищеға кәмегән). Бынан тыш, республикала биш федераль кимәлдәге һәм холоҡ төҙәтеү учреждениелары менән берлектә эшләгән ун уҡыу йорто иҫәпләнә. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бындай уҡыу йорттарына ҙур ярҙам күрһәтә. Әйтәйек, үткән уҡыу йылында 107 училище һәм 18 техникум өсөн федераль кимәлдә 296,4 миллион һум аҡса бүленһә, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте уларға 503 миллион һум аҡса күсергән.

— Әлбиттә, профессиональ лицей-училищелар һаны кәмеүенең объектив сәбәптәре лә бар — илдә үҫмерҙәр һаны кәмей, — ти Мирхәт Закир улы. — Әммә урта махсус белемле кешеләр кәрәклеген иҫтән сығарырға ярамай. Шуға ла әлеге ваҡытта ауылда йәки ҡалала ниндәй һөнәр эйәләре кәрәклеген күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ.

Бына шундай тырыш ул, киләсәк хаҡында уйланып йәшәй һәм эшләй.